# 5 – 9 класс уҡыусылары өсөн
# Башҡорт әҙәбиәтенән эш планы
### Уҡыу предметын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр

*Уҡыусыларҙың "Туған әҙәбиәт (башҡорт)" фәнен өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:*

<u>Уҡыусы өйрәнәсәк:</u>

- патриотик хис тәрбиәләргә, илгә, Рәсәйҙең күп милләтле халҡының үткәненә һәм бөгөнгөһөнә хөрмәт менән ҡарарға; үҙенең этник сығышын, үҙ халҡының, тыуған еренең тарихын, телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, кешелектең һәм Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ нигеҙҙәрен белергә; күп милләтле Рәсәй йәмғиәтенең гуманистик, демократик һәм традицион ҡиммәттәрен үҙләштерергә;
- уҡыуға, хеҙмәткә ҡарата яуаплы мөнәсәбәт формалаштырырға;

<u>Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:</u>

- хәҙерге донъяның социаль, мәҙәни, тел, рух күп төрлөлөгөн иҫәпкә алып, фәндең һәм ижтимағи тәжрибәнең хәҙерге заман үҫеш дәрәжәһенә тап килгән донъяға тулайым ҡараш формалаштырырға;
- башҡа кешегә, уның фекеренә, донъяға ҡарашына, мәҙәниәтенә, теленә, диненә, граждандлыҡ позицияһына, донъя һәм Рәсәй халыҡтарының тарихына, мәҙәниәтенә, диненә, ғөрөф-ғәҙәттәренә, телдәренә, ҡиммәттәренә аңлы, ихтирамлы һәм игелекле мөнәсәбәт формалаштырырға;
- фәнде үҙләштергәндә ижтимағи тормоштоң формаларын һәм ролдәрен, тәртиплелек ҡағиҙәләрен, йәшәү нормаларын үҙләштерергә;
- шәхси һайлап алыу нигеҙендә әхлаҡ проблемаларын хәл итеүҙә компетентлыҡты һәм әхлаҡи аңлылыҡты үҫтерергә, әхлаҡлылыҡ тойғоһо һәм әхлаҡи яктан үҙ-үҙеңде тәртипле тотоу нормаларын формалаштырырға;
- фәндәрҙе үҙләштереү барышында, фәнни-эҙләнеү, ижади һәм башҡа эшмәкәрлек ваҡытында, шулай уҡ аралашыу процесында (уҡыусы-уҡыусы, уҡыусы-уҡытыусы һ.б) коммуникатив компетентлыҡты үҫтерергә;
- йәмғиәт һәм кеше тормошонда ғаиләнең әһәмиәтен аңларға, ғаилә ҡиммәттәрен ҡабул итергә, ғаилә ағзаларына ҡарата хөрмәтле һәм ҡайғыртыусан мөнәсәбәттә булырға;
- донъя һәм Рәсәй халыктарының әҙәби мираҫын үҙләштереү процесында эстетик зауыҡты үҫтерергә.

*Метапредмет һөҙөмтәләре:*

<u>Уҡыусы телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен өйрәнәсәк:</u>

- белем алыу маҡсатын һәм бурыстарын үҙаллы билдәләргә, танып белеү мотивтарын һәм ҡыҙыкһыныусанлыҡты үҫтерергә;
- максаттарға ирешеү юлдарын, уҡыу һәм танып белеү бурыстарын хәл итеүҙең эффектив ысулдарын аңлы рәүештә һайларға;
- планлаштырылған һөҙөмтәләр менән үҙ хеҙмәте тиңләштерә белергә, һөҙөмтәләргә ирешеү процесында эшмәкәрлекте контролдә тоторға, тәкдим ителгән шарттарҙа һәм ҡуйылған талаптарҙа эшмәкәрлегенең ысулын билдәләргә, үҙгәреп торған ситуацияларҙа эшмәкәрлегенә коррекция индерергә;
- баһалау, үҙбаһалау нигеҙҙәренә эйә булырға;

<u>Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:</u>

- төшөнсәләрҙе билдәләргә, дөйөмләштерә, аналогиялар таба, төркөмдәргә бүлә, сәбәп-нәтижә бәйләнешен күрһәтә, логик фекерҙәр төҙөй, һығымта яһай (индуктив, дедуктив, аналогия буйынса) алырға;
- модель һәм схемалар, билдә һәм символдарҙы төҙөргә, үҙгәртә һәм ҡуллана белергә;
- аңлап-төшөнөп уҡыу алымына эйә булырға;
- үҙ тиңдәштәренең һәм уҡытыусылар менән уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора, төркөмдә һәм үҙаллы эшәй, үз фекереңде формалаштыра, аргументлаштыра һәм уны яҡлай белергә.

*Предмет һөҙөмтәләре*

<u>Уҡыусы өйрәнәсәк:</u>

- формаль һәм формаль булмаған мәҙәниәт ара һәм шәхес ара аралашыуҙарҙа кешеләр араһындағы аралашыуҙарҙың эффектлығын тәьмин итеүсе телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен үҙләштерергә (тыңларға, уҡырға, һөйләргә һәм яҙырға);
- белем биреү һәм үҙаллы белем алыу процесында шәхестең ижади һәм интелектуаль һәләттәрен үҫтереүҙә телдең мөһим роль башҡарыуын аңларға;
- туған телдең коммуникатив-эстетик мөмкинлектәрен ҡулланырға;
- туған тел тураһындағы фәнни белемде системалаштырырға һәм киңәйтергә, уның берәмектәре һәм баҫҡыстары араһындағы бәйләнештәр барлығына төшөнөргә, туған телдең төп берәмектәрен һәм категорияларын, лингвистиканың төп төшөнсәләрен үҙләштерергә;

<u>Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:</u>

- актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытырға, аралашыу стиленә һәм ситуацияға ярашлы туған телдә хистәрҙе һәм уйҙарҙы иркен белдереү өсөн һөйләмдә ҡулланылыусы грамматик сараларҙың күләмен киңәйтергә;
- туған тел лексикаһының һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, төп нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион), һөйләү этикеты нормаларын үҙләштерергә; уларҙы телдән һәм яҙма фекерҙәрҙе барлыҡҡа килтергәндә һөйләү практикаһында ҡулланыу тәжрибәһен булдырырға; телмәрҙе үҙаллы камиллаштырырға ынтылырға;
- дөйөм кешелек ҡиммәте булараҡ тел мәҙәниәте өсөн яуаплылыҡ хисе формалаштырырға.

<u>Уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусылар белергә тейеш:</u>

- йәмғиәт тормошонда телдең ролен, башҡорт (туған) теленең әһәмиәтен белергә;
- текстың эсендә һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнеп килеү саралары (юлдары); йәнле һөйләү, фәнни, күркәм (художестволы) стилдәр;
- телмәр төрҙәре (типтары): хикәйәләү, тасуирлау (һүрәтләү), хөкөм сығарырға (мөнәсәбәт белдереү);
- текстың төп фекерен, автор нимә әйтергә теләгәнен билдәләй белергә;
- текстың башланышын һәм тамамланышын күрһәтә белергә;
- өлгөгә ҡарап диалогтар төҙөргә.

<u>Түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:</u>

- иншаға материал туплярға һәм уны системалаштырырға;
- өйрәнелгән орфография ҡағиҙәләрен тәртипкә килтерергә
- өндәш һүҙе һәм тиң киҫәктәре булған ябай һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белергә.

Үҙләштергән белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡулланырға:

- төрлө мәғлүмәт саралары менән эшләргә (һүҙлектәр, белешмәләр);
- диалогта йә бәхәстә ҡатнашырға;
- йәнле һәм яҙма телмәрҙә синонимдарҙы, антонимдарҙы, күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе ҡуллана белергә;

Ижади һәләттәрҙе үҫтереү:

- билдәле бер тема буйынса өҫтәмә материал табырға һәм сығыш яһарға;
- иншалар, яттан шиғыр һөйләүселәр конкурстарында ҡатнашырға.

## Уҡытыу предметының йөкмәткеһе

### 5 класс

С.Муллабаев «Шатлыҡлы иртә». Б.Бикбай «Туған тел». Башҡорт халыҡ әкиәте «Әминбәк». Б.Ноғоманов «Йәйбикә менән Көзбикә». М.Кәрим «Сыйырсыҡ балаһы». Т.Ғәниева «Уралиә тигән ил». Р.Ниғмәти «Йәмле Ағиҙел буйҙары». Ә.Вахитов «Аҡһаҡал аманаты». А.Йәғәфәрова «Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар». Ф. Иҫәнғолов «Хәмит күпере». Ф.Иҫәнғолов «Йылмайыу»

Н.Мусин "Ҡоралайҙар». М.Кәрим" Ҡыш бабай бәләкәй саҡта".. Башҡорт халыҡ әкиәте" Аҡъял батыр". Башҡорт халыҡ әкиәте "Ҡамыр батыр". Р.Солтангәрәев "Эшләп ашаһаң". "Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән". Д.Бүләков "Яралы китап". Ә.Вахитов "Өс бөртөк бойҙай". М.Кәрим "Дан кәпәс түгел". Ә.Әминев "Әсикмәк". Ғ.Аллаяров "Таҫтамал"

З.Хисмәтуллин "Сыйырсыҡ". М.Кәрим" Һеңлемдең төшө". Башҡорт халыҡ әкиәте "Айыу менән бал ҡорттары". Ғ.Хисамов "Аҡъяурын сал бөркөт". М.Кәрим "Өс таған" (повестан өҙөк). К. Мәргән "Ҡурайсының үлеме". З.Хисмәтуллин "Урман ҡунағы". С.Агиш "Турыҡай". М Ғафури "Һарыҡты кем ашаған?" (Мәҫәл)

Б.Рафиҡов "Йондоҙ һанаусы малай". М. Кәрим "Ап-аҡ мөғжизә".

Телмәр үҫтереү. Инша, изложение яҙыу

### 6 класс

З.Биишева "Башҡортостан". Ф.Туғыҙбаева "Эй, яҙмышым минең - Башҡортостан"

Ә.Усманов "Башҡорттарҙың ғәскәри хеҙмәте". Ғ.Хөсәйенов "Рудасы Исмәғил Тасим улы"

Башҡорт ихтилалдары. М.Иҙелбаев "Хушлашыу". С.Злобин "Салуа Юлаев"

Я.Хамматов "Төньяҡ амурҙары". "Ҡаһым түрә" риүәйәте

Ә.Вәлиди Туған "Беренсе башҡорт ҡоролтайы". Р.Солтангәрәев "Осто бөркөт"

Башҡорт халыҡ йыры "Урал". Я.Хамматов "Ғәйзулла"

Башҡортостан йылғалары. Р.Бикбаев "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!". Ә.Вахитов "Ир ҡанаты"

Р.Янбулатова "Гүзәл Өфөм – баш ҡалам"

А.Ҡобағошов "Ҡарға буҫҡаһы тәмлеме?". С.Агиш "Ҡунаҡ һәм намыҫ"

Милли аштар

Яҡшы һүҙ – йән аҙығы (Башҡорт халыҡ әкиәте). Ә.Вахитов "Һүҙ хаҡында баллада"

Я.Хамматов "Башҡорттар китте һуғышҡа". Ә.Бикчәнтәев "Бөркөт һауала үлә". Р.Насиров "Ил балаһы Шакирйән"

Башҡорт халыҡ әкиәте "Урал батыр". Башҡорт халыҡ әкиәте "Алдар менән Шайтан"

Башҡорт әҙәбиәте тарихынан. Ҡол Ғәли "Йософ Ҡиссаһы"

Сәсәндәр ижады "Һабрау", "Ҡобағош сәсән"

М.Ғафури "Бир ҡулыңды". Р.Ғарипов "Аманат". Р.Бикбаев "Халҡыма хат"

М.Кәрим "Беҙҙең өйҙөң йәме"

Телмәр үҫтереү. Инша, изложение яҙыу

### 7 класс

Халыҡ ижады тураһында. Әкиәттәр тураһында. Хайуандар тураһында әкиәттәр. Тылсымлы әкиәттәр. Тормош-көнкүреш әкиәттәре. Риүәйәттәр һәм легендалар. Йырҙар. Таҡмаҡтар. Алтын ҡөҙ. М.Ғафури "Ҡыр ҡаҙы"

Р.Байбулатов "Күңел күҙҙәре"

Дуҫлыҡта - берҙәмлек. Р.Байбулатов "Һарыбай"

Хеҙмәт төбө - хөрмәт. М.Ғафури "Гөлдәр баҡсаһында". Ж.Кейекбаев "Туғандар һәм таныштар"

Башҡортостан - ғәзиз ерем. Ә.Үтәбай "Башҡортостан". М.Кәрим "Ҡайын япрағы тураһында"

Ап-аҡ ҡарҙар яуа. К. Кинйәбулатова "Һаумы, аҡ ҡыш!" Ә.Әһлиуллин "Биҙәкле сана"

Ил намыҫы-ир күңелендә. Р. Шәкүр "Һаҡта тора илдең улдары". Ф.Аҡбулатова "Атай икмәге". В. Исхаҡов "Кеше күңеле-тәрән даръя". А.Баһуманов "Ҡайҙа һин, генерал?"

Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр. Г. Юнысова "Әсәйҙәр байрамы". Ф.Иҫәнғолов "Бер йомғаҡ май". Ә.Бикчәнтәев "Яраланған бүре күҙҙәре". Г.Яҡупова "Мейес әбей"

Эй, күңелле яҙ килә! Р.Ниғмәти "Яҙ килде, яҙ!". Һ.Дәүләтшина "Айбикә"

Тел-тере шишмә. Ҡ.Аралбай "Башҡорт теле". М.Кәрим "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ".

Йәмле йәй. М.Ғафури “Болон”, Н.Игеҙйәнова “Өйрөлмәк”
Телмәр үҫтереү. Инша, изложение яҙыу

**8 класс**

С.Әлибай “Мәктәп юлы”. Н.Мусин “Һабаҡ”. Р.Тимершин “Уйлап табыусы”
Ике сәсән. Сура батыр
З.Биишева “Көҙгө ямғыр”. Р.Ханнанов “Икмәк ҡәҙере”. Р.Өмөтбаев ”Әмир баҫыуы”. Художестволы әҫәрҙең композицияһы тураһында төшөнсә
А.Игебаев ”Башҡортостан - илгенәм!”. Н.Нәжми, Р.Хәсәнов “Өфө йүкәләре”
Ф.Күзбәков ”Яу ораны бит һин, Салауат!”. Я.Хамматов ”Салауат”
Ш.Бабич ”Ҡышҡы юлда”, М.Ғәйфуллина ”Ҡыш моңдары”. Б.Рафиҡов ”Бүреләр”. И.Теләүембәтов ”Маралым таңы”
М.Кәрим “Үлмәҫбай”. Н.Ғәлимов ”Яуҙан ҡайтҡан ҡурай”. Р.Өмөтбаев ”Башҡорттар китте һуғышҡа”
Ш.Бикҡол ”Әсәйемдең кәңәштәре”. Т.Ғиниәтуллин ”Әсә һәм бала”
Х.Назар ”Өс һүҙ”. М.Ямалетдинов ”Иман”. З.Ғәлимов ”Ялан сәскәләре”.
Р.Ғарипов ”Яҙғы йыр”, З.Ураҡсин ”Алмағас”. Р.Сафин ”Тол ҡатындар һәм аяҡһыҙҙар бейеүе”.
Ҡ.Аралбай ”Ер тураһында ете һүҙ”, Б.Бикбай ”Ер”. Ж.Кейекбаев ”Урал тураһында ҡобайыр”. Н.Мусин ”Һуңғы солоҡ”
Ф.Рәхимғолова ”Бал ҡорто һәм күбәләк”, А.Йәғәфәрова ”Кескәй шишмә”. Ш.Янбаев ”Дегәнәк”.
Р.Солтангәрәев ”Һуңғы һунар”. Ә.Хәмәтдинова ”Йәшел дарыухана”.
Телмәр үҫтереү. Инша, изложение яҙыу

**9 класс**

Тере шишмәләр. Р.Ғарипов ”Тел”. Б.Бикбай ”Тере шишмәләр”. Т.Ҡарамышева ”Һүҙ”
Кендегемде киҫкән ер. К.Шафикова “Тыуған яҡ”. З.Вәлиди Туған ”Тыуған төйәгемдә”
Төйәк булған тыуған ер... Ф.Аҡбулатова ”Тәбиғәт беҙҙең ярҙамға мохтаж”. М.Кәрим ”Айыу мажараһы”. Р.Ҡаһир “Алтын тамыр”
Данлы тарих. Ш.Бабич “Халҡым өсөн”. Ғ.Хисамов ”Алдар менән Тәфтиләү”
Рухи тамырҙарыбыҙ. “Урал батыр” эпосы. Ҡ.Ғәли ”Йософ ҡиссаһы”. М.Аҡмулла “Инсафлыҡ”.
Ир-егеткәй менән ат башы. С.Ярмуллин “Башҡорт аты”. Р.Өмөтбаев”Ғилмишәриф”. Ғ.Вәлиуллин “Ҡәлғә хужаһы һәм тоткон”
Байрам. Байрам... Д.Мәһәҙиев ” Науруз байрамы”
Уралымда үҫкән, ай, ҡурайым... Ш.Бабич ”Ҡурайҡайға”. Р.Солтангәрәев “Ишмулла ҡурайсы”
Ватанға хеҙмәт – изге бурыс. Р.Мифтахов “Ҡалҡан”. М.Ямалетдинов ”Һалдат итеге”. Н.Асанбаев “Ҡыҙыл паша”
Айға ла ғына, көнгә тиңләмәйем... И.Кинйәбулатов ”Һеҙҙең йәшәү менән”. М.Воловик ”Ерәнсә сәсән ҡатын-ҡыҙ зирәклеге хаҡында”. Р.Кинйәбаев ”Мин ҡайтырмын, әсәй!”
Мәңгелек ут. Ә.Моратов ”Тере хәтер”. Н.Нәжми ”Ҡайтманығыҙ тыуған ерҙәргә”. Ж.Кейекбаев ”Зөбәй Үтәғолов”. Ш.Янбаев “Йәнекәй ҡарт”
Берҙәмлек мәңге һаҡлар хазина. Башҡортостан халыҡтары. Х.Ғиләжев “Россияға йыр”. С.Шәрипов “Һалсылар”
Телмәр үҫтереү. Инша, изложение яҙыу

**Тематик планлаштырыу**

**5 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Көҙ | 11 |
| 2 | Ҡыш | 11 |
| 3 | Яҙ | 10 |
| 4 | Йәй | 3 |
| Барлығы | | 35 |

**6 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Йырым минең – Башҡортостан | 2 |
| 2 | Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер | 2 |
| 3 | Ил һаҡлап, азатлыҡ даулап | 2 |
| 4 | Төнъяҡ амурҙары | 2 |
| 5 | Башҡорт автономияһы өсөн көрәш | 2 |
| 6 | Уралып ятҡан Уралтау | 2 |
| 7 | Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын | 3 |
| 8 | Тау башында балҡый бер ҡала | 3 |
| 9 | Башҡорт йолалары | 2 |
| 10 | Башҡорт аштары | 1 |
| 11 | Әсәм теле – сәсән теле | 2 |
| 12 | Башҡорттар китте һуғышҡа | 3 |
| 13 | Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады | 2 |
| 14 | Боронғо әҙәби ҡомартҡылар | 2 |
| 15 | Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары | 4 |
| 16 | Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ | 1 |
| Барлығы | | 35 |

**7 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Теле барҙың – иле бар | 7 |
| 2 | Уҡыу – белем шишмәһе | 1 |
| 3 | Дуҫлыҡта – берҙәмлек | 3 |
| 4 | Хеҙмәт төбө- хөрмәт | 2 |
| 5 | Башҡортостан – ғәзиз ерем | 2 |
| 6 | Ап-аҡ ҡарҙар яуа | 2 |
| 7 | Ир намыҫы - ил күңелендә | 4 |
| 8 | Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр | 5 |
| 9 | Эх, күңелле яҙ килә! | 2 |
| 10 | Тел – тере шишмә | 4 |
| 11 | Йәмле йәй | 3 |
| Барлығы | | 35 |

**8 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Мәктәп – белем шишмәһе | 3 |
| 2 | Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы | 1 |
| 3 | Көҙ – хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле | 4 |
| 4 | Башҡортостан – алтын бишек | 2 |

| | | |
|---|---|---|
| 5 | Салауат батыр ир ине | 3 |
| 6 | Ҡыш | 3 |
| 7 | Данлы йылдар – шанлы йылдар | 3 |
| 8 | Әсәйем – күңел ҡояшым | 2 |
| 9 | Әҙәп барҙа – иман бар | 3 |
| 10 | Шаулап-гөрләп яҙ килә | 2 |
| 11 | Ай, Уралым, Уралым! | 4 |
| 12 | Йәй | 5 |
| Барлығы | | 35 |

**9 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Тере шишмәләр | 3 |
| 2 | Кендегемде киҫкән ер | 2 |
| 3 | Төйәк булған тыуған ер... | 3 |
| 4 | Данлы тарих | 2 |
| 5 | Рухи тамырҙарыбыҙ | 3 |
| 6 | Ир-егеткәй менән ат башы | 3 |
| 7 | Байрам, байрам... | 2 |
| 8 | Уралымда үҫкән, ай, ҡурайым... | 2 |
| 9 | Ватанға хеҙмәт – изге бурыс | 4 |
| 10 | Айға ла ғына, көнгә тиңләмәйем... | 3 |
| 11 | Мәңгелек ут | 4 |
| 12 | Берҙәмлек - мәңге һаҡлар хазина | 3 |
| Барлығы | | 34 |